*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# Үрҙәр шулай яулана

Күгәрсен районы үҙенең арҙаҡлы шәхестәре менән киң танылыу яулаған төбәк. Улар араһында күренекле йәмәғәт эшмәкәрҙәре лә, яҙыусылар ҙа, актерҙар ҙа байтаҡ. Венир Ғәлимйән улы Аҙнағолов шундай абруйлы шәхестәрҙең береһе. Ул бар ғүмерен тыуған ауылы, районы, Башҡортостан Республикаһының үҫешенә арнаған кеше. Ә был һыҙат уға атаһы Ғәлимйән ағайҙан күскәндер — 14 йәшенән үк ауылдаштары, йәштәштәре араһында үҙенең уңғанлығы, тәүәккәллеге менән таныла ул. Ауылдың комсомол ячейкаһын етәкләгән егет йәштәрҙе ойоштороу, колхоз төҙөү эшен ҙур яуаплылыҡ менән атҡара, Хоҙайбирҙин исемендәге колхоздың рәйесе лә була. Бөйөк Ватан һуғышында ауыр яраланып ҡайтҡандан һуң да оҙаҡ йылдар төрлө колхоздарҙы етәкләй. Ғәлимйән ағайҙы районда һәр эште намыҫ менән башҡарған кеше булараҡ хәтерләйҙәр.

Венир Ғәлимйән улының әсәһе Миңлеямал апай иһә Хоҙайбирҙин ауылының уңған килендәренең береһе була. Сөгөлдөр ҙә үҫтерә, кол-



*Венир Ғәлимйән улы Аҙнағолов 1947 йылда Күгәрсен районының Хоҙайбирҙин ауылында тыуған. Башкортостан ауыл хужалығы институтын, Свердловск юғары партия мәктәбен тамамлаған.*

*Хеҙмәт юлын Күмертау калаһында ДОСААФ-тың район комитеты рәйесе вазифаһынан башлай, ауыл хужалығы институтын тамамлағас, Хоҙайбирҙин исемендәге колхозда баш агроном, партком секретары булып эшләй.*

*1978 йылда ул КПСС-тың Күгәрсен районы комитетының икенсе, 1987 йылда беренсе секретары итеп һайлана. 1991—1992 йылдарҙа халык депутаттарының Күгәрсен район советы рәйесе, 1992—2000 йылдарҙа Күгәрсен районы хакимиәте башлығы вазифаһын аткара. 2000 йылдан Башкортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай Секретариаты етәксеһе.*

*В.F.Аҙнағолов — сәйәси фәндәр кандидаты, Башкортостан Республикаһының атказанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре. Башкортостан Республикаһының Почет грамоталары, II дәрәжә «Ватан алдында хеҙмәте өсөн» ордены, «Өлгөлө хеҙмәт өсөн» миҙалы менән наградланған.*

хозсылар өсөн икмәк тә бешерә. Хәҙер инде 92 йәшен барлаған Миңлеямал инәй боронғо йырҙарҙы оҫта башҡарыуы менән дан ҡаҙана. Бына ошо татыу ғаиләлә биш бала үҫә, барыһы ла тормошта лайыҡлы урын таба. Венир Ғәлимйән улы иһә улар араһында иң киң танылғаны.

Йәштән үк һәр эшкә ҡыйыу тотонорға күнеккән Венир Ғәлимйән улы Күгәрсен районы хакимиәте башлығы булып эшләгән осорҙа айырыуса күп эштәр атҡара. Был йылдар илебеҙ тарихында киҫкен үҙгәрештәр барған осорға тура килә. Райондың баҙар иҡтисады шарттарында эшләүгә һәм йәшәүгә яраҡлашыуында уның хеҙмәт өлөшө айырыуса ҙур. Тырышлыҡ бушҡа китмәй: райондың социаль йөҙө йылдам үҙгәрә, халыҡтың йәшәү кимәле күтәрелә, көнкүреш мәсьәләләренә ҙур иғтибар бүленә. Торлаҡ мәсьәләһенең иң мөһим итеп ҡуйылыуы ыңғай һөҙөмтәләр бирә — Венир Ғәлимйән улы районды етәкләгән осорҙа йылына 17—18 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлөп, файҙаланыуға тапшырыла. Йорт төҙөүселәргә ссуда бирелә, төҙөлөш материалдары менән тәьмин итеү яҡшыра. Ауылдарҙа береһенән-береһе матурыраҡ шәхси йорттар ҡалҡып сыға. Йомағужа кирбес заводының сафҡа инеүе халыҡ өсөн отошло була.

Күгәрсен районы ауылдарында бик тиҙ газ индерелеүҙә лә Венир Ғәлимйән улының тырышлығы күренә. Йөҙҙән ашыу ауылға газ индереү, әлбиттә, еңелдән булмай, әммә хакимиәт башлығы маҡсатынан сигенмәй. Ә юлдар... Күгәрсен районы ауылдары араһында юлдар һалына, асфальт түшәлә. Ауылдар төҙөкләндерелә, йорттарға телефон үткәрелә. Тап ошо йылдарҙа мәктәптәр төҙөүгә иғтибар арта, йылына 3—4 яңы мәктәп төҙөлөп, файҙаланыуға тапшырыла. Спорт залы, медицина пункты, балалар баҡсаһы булған социаль комплекстар өҫтөнлөк ала. Әйткәндәй, ошондай йүнәлеш әлеге ваҡытта ла отошло һанала.

Иҡтисад өлкәһенә килгәндә, районда колхоз, совхоздарҙы һаҡлап ҡалырға, уларҙың эшен заманға ҡарап камиллаштырырға кәрәклеген яҡшы аңлай Венир Ғәлимйән улы. Әммә ул һәр кеше ошо хужалыҡта





үҙен хужа итеп тойғанда ғына яҡшы һөҙөмтәгә ирешеп буласағын яҡшы аңлай, башҡаларға ла шуны төшөнөргә ярҙам итә. Шуға күрә бөтә хужалыҡтарҙа ла ер һәм мөлкәт пайы бүлеп бирелә. Теләгән һәр кем үҙ пайын алып айырылып сыға ала.

Ауыл хужалығын күтәреүҙең икенсе юлын ауыл кешеһенә, уның шәхси хужалығын үҫтереп, һәр яҡлап ярҙам итеүҙә күрә район хакимиәте башлығы. Әлеге ваҡытта Күгәрсен төбәгендә шәхси хужалыҡтарҙың үҫешкән булыуы, халыҡтың күпләп йәшелсә-емеш үҫтереүе Венир Ғәлимйән улы сәскән орлоҡтарҙың емеше ул.

Райондың иҡтисади үҫешенең тағы бер мөмкинлеген урындағы продукцияны эшкәртеү предприятиелары асыуҙа күрә етәкселәр. Хәҙер иһә һәр хужалыҡта тиерлек май һығыу цехы, тирмән бар. Райондағы май һығыу цехы әле лә республикала иң сифатлы көнбағыш майы етештерә. Һөт эшкәртеү буйынса тап ошо йылдарҙа һатып алынған ҡоролма һөҙөмтәле эшләй һәм унда етештерелгән сыр районда ғына түгел, күрше-тирәлә лә ҙур һорау менән файҙалана.

Хеҙмәтенә күрә хөрмәте, тиҙәр. Венир Ғәлимйән улы ике тапҡыр БАССР-ҙың Юғары Советына, ике тапҡыр Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтайҙың Вәкилдәр палатаһына депутат итеп һайлана. Районды алдынғылар сафына сығарған әүҙем етәксене тиҙҙән баш ҡалабыҙ Өфөгә Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай Секретариаты эшмәкәрлеген етәкләргә саҡыралар.

Күҙҙәренән һәр саҡ нур бөркөлөп торған ихлас, кешеләргә иғтибарлы Венир Ғәлимйән улы бына ете йылдан ашыу Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай Секретариаты эше тейешле кимәлдә барһын өсөн күп көс һала. Секретариат — Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтайҙың эшмәкәрлеген тәьмин итеүсе орган. Был эште алып барыусыға депутаттар менән эш итергә, сессия ултырыштарын әҙерләргә һәм үткәрергә, сит ил делегацияларын ҡабул итеүҙе юғары кимәлдә ойошторорға, хужалыҡ, транспорт һәм башҡа мәсьәләләрҙе хәл итергә тура килә.

Уның эшен иң элек депутаттар баһалай. Тәүге һүҙ Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты, мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт, туризм һәм йәштәр эштәре буйынса комитет рәйесе Рафаил Нурый улы Мирсаевҡа:

— Мин элек-электән ошо эштәр менән шөғөлләнгән кеше булараҡ, Секретариат етәксеһенең эше үтә яуаплы, мәшәҡәтле булыуын яҡшы

беләм. Венир Ғәлимйән улы — юғары квалификациялы, белемле, һәр өлкәлә компетентлы шәхес.

Беҙ, депутаттар, эште ойоштороу, яҙылған ҡулланмаларҙы, китаптарҙы баҫтырыу, экспертизалар үткәреү йәһәтенән бер ҡыйынлыҡ та кисермәйбеҙ, сөнки белгестәр үҙ эшен яҡшы белә, оҫта һайланған. Венир Ғәлимйән улы һәр кешегә талапсан, эште аныҡ, үҙ ваҡытында башҡарыуҙы күҙаллай.

Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай — ике йөҙҙән ашыу кешене берләштергән ҙур ойошма, һәм был берҙәм коллектив берҙәм маҡсат менән эшләй: халыҡ өсөн, халыҡҡа файҙалы булған яҡшы закондар сығара, ошо закондарҙың тормошҡа ашыуына өлгәшә. Мине айырыуса Венир Ғәлимйән улының бында эшләгән һәр кешене яҡындан белеүе, кәрәк саҡта ярҙамға килеүе һоҡландыра.

Икенсе әңгәмәсебеҙ — юридик фәндәр докторы, профессор, Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтайҙың урындағы үҙидара, милләт эштәре, ижтимағи ойошмалар һәм дини берекмәләр, мәғлүмәт сәйәсәте буйынса комитет рәйесе Зөфәр Ирғәле улы Еникеев:

— Венир Ғәлимйән улын ул Күгәрсен районында хакимиәт башлығы булып эшләй башлағандан алып беләм. Ә бына Ҡоролтай Секретариатына эшкә килгәс, уның өр-яңы сифаттарын астым. Иҫ киткес ҙур эш алып бара ул. Парламент эшенең үҙенсәлектәре бик күп. Секретариат етәксеһе ғалим да, юрист та, ғөмүмән, профессионал булырға тейеш. Венир Ғәлимйән улы был сифаттарҙың барыһына ла эйә. Ҡоролтайҙың республикабыҙ мәҙәниәтен, телде үҫтереүгә индергән тос өлөшөнә тап уның хеҙмәте һалынған. Бына беҙҙә уның туранан-тура етәкселеге менән «Парламент тарихы» музейы асылды. Ундай музей әле бер ҡайҙа ла юҡ.

2003 йылда «Башҡортостан парламенты: тарих һәм заман» тигән ике томлыҡ китап донъя күрҙе. Был китап, абруйлы редколлегия тупланып, Венир Ғәлимйән улы етәкселегендә әҙерләнде. Закондар өлкәһендә эшләүселәргә бик кәрәкле булған «Башҡортостан закондары һәм норматив хоҡуҡ акттары» йыйынтығы ла К.Б.Толкачев, В.Ғ.Аҙнағолов һәм башҡалар етәкселегендә баҫылып сыҡты.

Мин бына дүртенсе срок депутатлыҡ вазифаһын үтәйем. Ошо осорҙа эштә Секретариат менән бәйле бер генә проблема ла булманы. Эшкә киләһе килеп тора. Тимәк, Секретариат, уның етәксеһе яҡшы эшләй.

Эш өсөн мөкиббән киткән, ғүмерен шуға арнаған кеше ул Венир Ғәлимйән улы. Әлбиттә, эше уңышлы барһын өсөн ғаиләһендә уны аңлап тороуҙары мөһим. Был йәһәттән уңды Венир Ғәлимйән улы: ғүмер юлдашы Мәбүрә Ғиниәт ҡыҙы менән бер-береһен ярты һүҙҙән аңлап йәшәйҙәр. Күгәрсен районының Һапаш ауылы ҡыҙы Мәбүрә ханым оҙаҡ йылдар мәктәптә биология фәнен уҡыта, Башҡортостан мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ.

Татыу ғаиләлә ике бала үҫкән. Ҡыҙҙары Айгөл — табип, улдары Илһам — юрист. Икеһе лә ғаилә ҡороп, улдар үҫтерә. Венир Ғәлимйән улы өсөн ейәндәре Радмир менән Морат бигерәк тә ҡәҙерле.

Олатай, атай, хөкүмәт етәксеһе — бөтә был вазифаларҙы юғары кимәлдә башҡара ул. Киләсәктә лә шулай булһын.